## Тема: Ҡурай моңо

**Маҡсат:**

1) Милли музыка ҡоралы – ҡурай, ҡурайсылар менән таныштырыу.
2) Ҡурайҙың башҡорт халҡында ниндәй урын биләүен, һаулыҡ өсөн әһәмиәтен төшөндөрөү.
3) Ауыҙ-тел ижады, әҙәбиәт аша уҡыусыларға башҡорт халыҡ музыкаһына һөйөү тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:**

1) Башҡортостан Республикаһы гербы һәм флагы.
2) Ҡыу ҡурайҙар.
3) Урмандағы ҡош-ҡорт тауыштары яҙылған магнитофон яҙмаһы.
4) Ҡурайсыларҙың портреттары.
5) Китаптар күргәҙмәһе.

**Дәрес барышы:**

I Ойоштороу мәле.

II Дәрестең маҡсатын билдәләү.(Ш.Бабич "Ҡурайҡайға" шиғыры.)

- Уҡыусылар, был шиғырҙа нимә тураһында һүҙ бара? -

Эйе, ҡурай тураһында. Ҡәҙерле уҡыусылар! Бөгөн беҙ дәрестә башҡорт халҡының милли уйын ҡоралы – ҡурай менән, ҡурайҙың башҡорт халҡында ниндәй урын биләүен, шулай уҡ атаҡлы ҡурайсылар менән танышасаҡбыҙ.

III –Ҡәҙерле балалар, хөрмәтле ҡунаҡтар! Иғтибар менән тыңлағыҙ әле. Тирә-яҡ ниндәй сихри моңға күмелгән? (ҡурайҙа уйнайҙар)

-Ҡурайҙа кемдәр уйнай? (ҡурайсылар)

-Эйе, башҡорт халҡының милли музыка ҡоралдары араһында иң данлыҡлыһы - әлбиттә, ҡурай. (Башҡортостан Республикаһы гимны аҫтында гербты һәм флагты алып инеү)

-Уҡыусылар, герб менән флагта ниндәй уртаҡ һүрәт бар? (ҡурай һүрәте)

- Дөрөҫ әйтәһегеҙ! Ете таж япрағынан торған ҡурай сәскәһе эшләнгән. ҡурайҙың ете тажы нимә аңлата?(ете ырыуҙы)

- Таҡтаға ҡарағыҙ әле! Унда ете ырыуҙың атамалары яҙылған. Дәфтәрегеҙгә күсереп алығыҙ һәм хәтерегеҙҙә ҡалдырырға тырышығыҙ.

-Ә ҡурай нимә символы ул? (берҙәмлек, дуҫлыҡ, татыулыҡ символы)

- Эйе, афарин! Салауат Юлаев – батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ өлгөһө булһа, ҡурай

- хистәр ташҡыны, моңдар даръяһы, көйҙәр шөһрәте ул.

- Уҡыусылар, һеҙгә ҡурай тураһында шиғырҙар, төрлө мәғлүмәттәр белеп килергә ҡушылғайны. Хәҙер һеҙҙе тыңлап үтәйек. (өй эше)

-Ҡурайҙа уйнаусы кешеләрҙе нисек атайҙар? (ҡурайсылар)

-Дөрөҫ, мин һеҙгә бер мәғлүмәтте еткерәһем килә. Ҡурайсының күкрәге киң, һулышы иркен, ул бер ҡасан да тын юлы ауырыуҙары менән ауырымай.

- Танылған ҡурайсыларҙан кемдәрҙе беләһегеҙ? Әйҙәгеҙ, сылбыр буйынса һанап үтәйек. (Ғата Сөләймәнов, Рәмил Ғәйзуллин, Азат Айытҡолов, Ишмулла һәм Сәйфулла Дилмөхәмәтовтар, Йомабай Иҫәнбаев, Ишморат Илбәков, Рәсүл Ҡарабулатов, Абдулла Хәлфетдинов, Мөхәммәт Түләбаев һ. б. )

- Бик, мәслихәт. (Урмандағы ҡош-ҡорт тауыштары яҙылған яҙманы тыңлау. Таҡтала тәбиғәт һүрәтләнгән картина.)

- Бына ошондай матур тәбиғәт ҡосағында иртә яҙҙан ҡаратупраҡты тишеп сыҡҡан үләндәр менән бергә бер эре йәш ҡыяҡ баш ҡалҡыта. (үлән ҡурайҙы тотоп һөйләйем.)

- Хәҙер ҡурайҙы ағастан да яһайҙар. (Уҡыусылар ҡурайҙарҙы тотоп ҡарайҙар.)

- Таҡталағы артист Исхаҡ Зәйни һүҙҙәрен ҡысҡырып кемегеҙ уҡып ишеттерә? (Теләк буйынса уҡып ишеттерәләр)

- “Ҡурай” тигән йырында халыҡ был турала нимә ти? Әйҙәгеҙ, тыңлап ҡарайыҡ.

- Арып киткәнһегеҙҙер. Ҡурай моңо аҫтында өйрәнгән хәрәкәттәр менән тыпырлап алайыҡ. (Ял минуты)

- Ҡурай моңо әҫәрләндереүсе кешене бар донъяһын оноттороп ләззәтләндерә, хыялын әллә ҡайҙарға алып китә. (Йомабай Иҫәнбаевтың портретын күрһәтәм)

- Йомабай Иҫәнбаев 1925 йыл-да беренсе булып Парижда ҡурай тартыу бәхетенә ирешә. (тарихы менән таныштырып үтәм)

- Бөгөн һеҙгә үҙемдең уҡытыусым тураһында ла һөйләп үтәһем килә.

Һәр бер ил, өлкә, республика үҙенең данлыҡлы, мәшһүр кешеләре менән дан алған кеүек, беҙҙең Башҡортостан Республикаһы ла үҙенең атаҡлы ҡурайсылары менән данлыҡлы. Шуларҙың береһе танылған ҡурайсы, өҙләүсе Мөхәммәт Усман улы Түләбаев. Шығай урта мәктәбен тамамлағас, БДУ –ның биология факультетына уҡырға инә. Һәм хәҙер 40 йылдан ашыу балаларға биологиянан белем бирә. Мөхәммәт Усман улы оҫта уҡытыусы ғына түгел, оҫта ҡурайсы ла. Үҙенең ҡурайы

менән ул Башкортостаныбыҙҙы ғына түгел, бик күп сит илдәрҙе таң ҡалдырған ҡурайсы: Франция, Германия, Голландия, Швейцария, Төркиә, Сирия, Египет, Италия, Греция, Бельгия, Мальта, Япония. Ул Ишмулла Дилмөхәмmәтовтан ҡала өсөнсө булып Парижда ҡурай тартыу бәхетенә ирешә. Ул шулай уҡ киләсәк быуынға ла ҡурай серҙәрен өйрәтә. Мөхәммәт Усман улы етәкләгән йәш ҡурайсылар Өфөләге конкурста лауреат исемен яулай.

- Һоҡланғыс, талантлы кешеләр беҙҙең Ҡыйғы ерендә лә юҡ түгел. Бөгөн беҙҙә ҡунаҡта музыка мәктәбе уҡытыусыһы Венер Әнүәр улы Ураҙгилдин. Ул Баймаҡ районы Муллаҡай ауылында тыуып үҫә. 1995 – 1999 –йылдарҙа Учалы ҡалаһындағы музыка училищеһының башҡорт, фольклор бүлегендә белем ала. Әлеге ваҡытта йәш ҡурайсыларға ҡурай серҙәрен өйрәтә. Шулай уҡ райондағы ғына түгел, ә Силәбе, Ҡурған өлкәһендәге концерт һәм фестивальдар ҙа Венер Әнүәр улынан башҡа үтмәй. Йәш булыуына ҡарамаҫтан, ул үҙен оҫта ҡурайсы, өҙләүсе итеп танытты.

- Ә хәҙер һүҙҙе ошо талант эйәһенә бирәбеҙ. Иғтибар менән тыңлап, һорауҙарығыҙҙы әҙерләп ултырығыҙ. Рәхим итегеҙ, Венер Әнүәр улы! (һөйләй.)

- Рәхмәт, был дәрестән һуң һеҙҙең уҡыусыларығыҙ тағы ла , артыр тип ышанабыҙ!

- Ижади уңыштар һеҙгә!

- Балалар, һеҙгә 8 в синыфынан да ҡунаҡтар килгән. Улар һеҙгә “Ҡурай” әкиәтен сәхнәләштереп күрһәтерҙәр. (күрһәтәләр һәм аҙаҡтан уҡыусыларҙы һәм ҡунаҡтарҙы сәк-сәктән ауыҙ иттерәләр.)

- Рәхмәт!

IV – Балалар, беҙ бөгөн ҡурай тураһында күп мәғлүмәттәр алдыҡ. Әйҙәгеҙ әле. Яңынан иҫкә төшөрөп үтәйек. (Ҡурай тураһында йырҙар, шиғырҙар менән таныштыҡ. Легендаһын иҫкә төшөрҙөк. Әкиәтен ҡараныҡ. Ҡурайсылар менән таныштыҡ. Һаулыҡҡа файҙалы икәнен белдек. Башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныуыбыҙ артты.)

V - Рәхмәт, уҡыусыларым! Мин һеҙҙең сығыштарығыҙ менән бик шатмын. Һәр ваҡыт шулай әүҙем булығыҙ. (Яуаптарын баһалау)

VI Өйгә эш биреү.